# Гөлфиә Юнысова

Ижади портрет.
Балалар әдәбиәте.



# Гөлфиә Юнысова

your-way.at.ua

# Гөлфиә Юнысова
# ( Иҙелбаева Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙы)



1948 йылдың 10 сентябрендә Әлшәй районының Һарыш ауылында тыуған. Тәүге шиғырҙары Себенле һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең 5- се класында уҡыған сағынан республикабыҙҙың "Пионер" (хәҙерге "Аманат") журналында, "Башҡортостан пионеры"(хәҙерге "Йәншишмә"), Совет Башҡортостаны"( хәҙерге" Башҡортостан") һәм район газеталарында донъя күрә башлай.




1-се һанлы Раевка башҡорт мәктәбендә белем алғас, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә һәм 1971 йылда уны тамамлап сыға. Студент йылдарында уҡ йәш шәғирәнең балалар өсөн “Миңә бары өс кенә” һәм “Зәңгәр тубым” тигән шиғри йыйынтыҡтары




Гөлфиә Юнысова

1974 йылда, 26 йәшендә, СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы итеп алынды һәм РСФСР Яҙыусылар союзы идараһы итеп һайланды.

- Шағирәнең шиғри шәлкемдәре Рәсәйҙең, яҡын һәм алыҫ сит ил халыҡтарының 25 теленә тәржемә ителде, уның 6 йыйынтығы рус телендә Мәскәү, 2 китабы ҡарағалпаҡ телендә “Нөкөс” китап нәшриәтендә һәм татарса Ҡазанда донъя күрҙе. Уның бер шәлкем шиғырҙары балалар өсөн яҙылған донъялағы иң һәйбәт әҫәрҙәр иҫәбенә “Просвещение”(Мәскәү) нәшриәте сығарған “Балалар әҙәбиәте буйнса хрестоматия”ға (1984 йыл), Башҡортостанда башҡорт, рус, татар телдәрендә донъя күргән байтаҡ дәреслектәргә һәм кластан тыш уҡыу китаптарына индерелгән.
- Гөлфиә Юнысованың лирик һәм балалар өсөн яҙылған шиғырҙарына 300- гә яҡын ижад ителгән.



Унынң пьесаһы буйынса А. Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры сәхнәләштерелгән “Осоп булмай ҡанатһыҙ” музыкаль комедияһын тамашасылар яратып ҡабул итте.

Гөлфиә Юнысова 1973 – 1978 йылдарҙа “Совет Башҡортостаны” газетаһында хәбәрсе, “Пионер” журналында бүлек мөдире булып эшләне, ә 1978 йылдан 1999 йылға тиклем республикабыҙҙың ғаилә журналы “Башҡортостан ҡыҙы” нда баш мөхәррир вазифаһын башҡарҙы.

Әҙәбиәт, мәҙәниәт, журналистика, мәғариф өлкәһендә күрһәткән уңыштары өсөн шағирә, журналист һәм сәйәсмән Гөлфиә Юнысова:



- СССР- ҙың “Почет Билдәһе” орденына,
- “Башҡортостан Республикаһында күрһәткән физағәр хеҙмәттәре өсөн” билдәһенә,
- Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһына,
- “Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнығы” , Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты
- Аҡмулла исемендәге премия лауреаты тигән юғары исемдәргә лайыҡ булды

# Гөлфиә Юнысованың баҫылып сыҡҡан китаптары

*Башҡорт телендә:*

- ❖Миңә бары өс кенә. Шиғырҙар. – Өфө, 1969
- ❖Зәнғәр тубым. Шиғырҙар. – Өфө, 1971
- ❖Яҙ хаҡында әкиәт. Әкиәттәр һәм хикәйәләр.– Өфө, 1973
- ❖Тылсымлы бүләк. Шиғырҙар. – Өфө, 1975
- ❖Ҡояшлы иртә. Шиғырҙар. – Өфө, 1977
- ❖Борғо саҡыра.Шиғырҙар. – Өфө, 1979
- ❖Бәпембә. Шиғырҙар. – Өфө, 1982
- ❖Буҙ турғай йыры. Шиғырҙар. – Өфө, 1983
- ❖Өмөтөмдән юғалма. Шиғырҙар. – Өфө, 1990
- ❖Юлдар ҡайҙа илтә? Әкиәттәр һәм хикәйәләр.– Өфө, 1991
- ❖Ҡунаҡта. В гостях (башҡортса, русса). Шиғырҙар. – Өфө, 1995
- ❖Йылғыр тупҡайым. Шиғырҙар. – Өфө, 1996
- ❖Аҡ ямғыр. Шиғырҙар. – Өфө, 1998
- ❖Һандуғас моңо. Шиғырҙар. – Өфө, 1998
- ❖Донъя менән танышам. Шиғырҙар. – Өфө, 2001

- Тәнәфес. Балалар өсөн йырҙар. – Өфө, 2001
- Йәйғор. Шиғырҙар. – Өфө,2003
- Балаларға йөҙ йыр. – Өфө, 2003
- Дуҫлыҡ ҡайҙан башлана?Әкиәт. – Өфө, 2005
- Мөғжизәле сәйәхәт. Шиғырҙар. – Өфө, 2005
- Ғүмер юлы. Шиғырҙар һәм йырҙар. – Өфө, 2008

Татар телендә:

- Серле утрау.Шигырьләр. – Ҡазан, 2004
- Дуслык кайлан башлана? Әкият. – Өфө,2005

Рус телендә:

- Голубой мячик. Стихи. –Уфа,1976
- Песня березки.Стихи. – Москва, “Малыш”,1979
- Дома улыбаются. Стихи. – Москва, “Детгиз”, 1980
- По солнечной радуге. Стихи. – Москва, “Молодая гвардия”, 1985
- Праздник памяти. Стихи. – Уфа, 1986
- Наша песня. Стихи. – Москва, “Советская Россия”, 1986
- Надежда. Стихи. - Москва, “Современник”, 1987
- Солнечный остров. Стихи. – Уфа, 1998

Ҡарағалпаҡ телендә:

- Ҡоңырау. – “Нөкөс”, 1979

# Осоу

Ҡар тауынан саңғы менән
Эй, еләмен түбән таба,
Битте елдәр һыйпап ала,
Табанда ҡар шыжлап ҡала.
Алда бер ни ҙә күренмәй,
Юл да ап-аҡ, күк тә ап-аҡ.
Аҡ болоттар араһынан
Осоп барам һымаҡ.

# Таҡта янына сыҡҡас

Уҡытыусы һорау биргәс,
Бар класс тынып ҡала.
Сабыр ғына ҡул күтәрә
Дәресте белгән бала.
Әхәт кенә ҡысҡырына,
Урында сыҙый алмай.
Тәртипте лә онота ул,
Дуҫтарын да һанламай.

Уҡытыусы әйтә ахыр:
-Йә сыҡ, Әхәт, таҡтаға,
Бөгөн үткән ҡағиҙәне
Хәҙер аңлатып ҡара.
Нимә булды был Әхәткә?
Туҡтауһыҙ тамаҡ ҡыра:
Дуҫтарынан ярҙам көтөп,
Мөлдөрәп ҡарап тора.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!